# Уйындан - үҫешкә

## Дидактик уйындар



Аҙнабаева Ф. Ғ., Шафиҡова Г. Р., Әғзәмова З. Ә.

# УЙЫНДАН – ҮҪЕШКӘ

## Дидактик уйындар



*(күргәҙмәле дидактик ҡулланма)*

Башҡортостан Республикаһы
Мәғариф министрлығы
тарафынан раҫланды

Зәйнәб Биишева исемендәге "КИТАП" нәшриәте

ӨФӨ·2011

УДК 372.016:811.512.141
ББК 74.268.0 Баш
А 30

**Аҙнабаева Ф. Ғ., Шафиҡова Г. Р., Әғзәмова З. Ә.**
А 30 Уйындан – үҫешкә. Дидактик уйындар: мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн. – Өфө: Китап, 2011. – 256 бит.

ISBN 978-5-295-05297-2

Дидактик уйындар баланы физик һәм музыкаль тәрбиә биреүҙе, халҡыбыҙҙың көнкүреше, мәҙәниәте, сәнғәте менән таныштырыуҙы күҙ уңында тота. Ҡулланма ошондай уҡ исем менән 2010 йылда сыҡҡан баҫмаҡың дауамы булып тора.

Балалар баҡсаһы тәрбиәселәренә, ата-әсәләргә тәҡдим ителә.

УДК 372.016:811.512.141
ББК 74.268.0 Баш

ТП – 112/11

ISBN 978-5-295-05297-2

© Аҙнабаева Ф. Ғ., Шафиҡова Г. Р., Әғзәмова З. Ә., 2011
© Панфиленко С. В., Шанин К. А., Кәримова З. И. һүрәттәре, 2011
© Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы, 2011

# Хөрмәтле тәрбиәселәр һәм ата-әсәләр!

Һеҙҙең иғтибарығыҙға мәктәпкәсә йәштәге балалар үҫешенә булышлыҡ итеүсе дидактик уйындарҙың икенсе өлөшө тәҡдим ителә.

Дидактик уйындар, мәҫәлән, «Башҡорт халҡының кәсептәре» (лото), «Башҡорт халыҡ әкиәттәре» (пазл), баланың йәш үҙенсәлектәренә таянып, бер нисә вариантта бирелә.

Мәктәпкәсә йәштәге балаға уйын – шәхес үҫеше сығанағы ул. Бала уйын эшмәкәрлеге аша үҫешә. Дидактик уйындар баланың психик процестары – фекерләү, күҙаллау, хәтерләү һәм ижади үҫешеү; предметтарҙы үҙенсәлектәре аша сағыштырыу; төп йүнәлештәрҙе аңлап, күреү һәм атау; халҡыбыҙҙың тарихы, көнкүреше, мәҙәниәте, гөрөф-ғәҙәте, сәнғәте менән таныштырыу; тирә-йүн менән танышыу; физик һәм музыкаль тәрбиә биреү; художество-эстетик һәм телмәр үҫтереү эшмәкәрлеген-дә өйрәнелгән материалдарҙы нығытыу, дөйөмләштереү, сағыштырыу, танып белеүен үҫтереү маҡсатын үҙ эсенә ала.

Төҫлө сағыу һүрәттәр баланы үҙенә тартып тора, ә бала ҡыҙыҡһынып уйнап, һеҙ баланың хәтерен, зиһенен, иғтибарын, телмәрен һәм фекерләү һәләтен үҫтереүгә булышлыҡ итәсәкһегеҙ.

Дидактик уйындарҙа бирелгән күнекмәләр балаға төрлө ҡыҙыҡлы эштәрҙе үтәп, уның белемен нығытыуға һәм белем кимәлен башҡаларға күрһәтеп, тиҫтерҙәре һәм ололар менән аралаша белеүенән ҡыуаныс һәм шатлыҡ хистәре кисереүгә мөмкинселек бирәсәк.

Дидактик уйындар ҡулланмаһы менән нисек эшләргә:

1. Тәүҙә уйындың йөкмәткеһенә ярашлы маҡсатҡа төшөнөгөҙ.

2. Уйындың атамаһын, балаға нимәгә иғтибар итергә кәрәклеген аңлатығыҙ.

3. Бала менән бергәләп һүрәттәрҙе ҡарағыҙ.

4. Уйын тәртибен тәүҙә үҙегеҙ өйрәнеп, үтәп ҡарағыҙ, унан һуң ғына балаға аңлатып төшөндөрөгөҙ.

5. Баланан уйын маҡсатын үҙенсә хәл итә алыуын һорап белешегеҙ, әгәр ул дөрөҫ фекерләһә, үҙ аллы уйнарға йәки уйынды ойоштороуҙа үҙ ҡатнашлығығыҙҙы тәҡдим итегеҙ.

6. Баланың уйынға ынтылышын һәм тырышлығын хупларға онотмағыҙ.

Һеҙгә һәм балаларға уңыштар юлдаш булһын!

# ДИДАКТИК УЙЫНДАР

## «НИМӘ БАЛАҺЫ?»

**Маҡсат:** балаларҙың ҡоштар һәм хайуандар тураһындағы белемдәрен тикшереү һәм тулыландырыу. Уларҙы һүрәттә танып, атамаһын әйтә, хәрәкәтен күрһәтә һәм тауыштарын айыра белергә өйрәтеүҙе дауам итеү. Балаларҙың хәтерен, зиһенен, телмәрен үҫтереү.

### Уйын тәртибе.

**Беренсе вариант.** Тәрбиәсе ҡулында ҡоштар һәм хайуандар төшөрөлгән предметлы һүрәттәр. Бала бер һүрәтте тартып сығарып (икенселәр күрмәҫкә тейеш), шул һүрәттәге хайуандың йә ҡоштоң хәрәкәтен эшләп йәки тауышын оҡшатып әйтеп күрһәтә. Балалар ниндәй ҡош йәки хайуан икәнен танып, атамаһын әйтә, һүрәтен таба.

**Икенсе вариант.** Балалар һүрәтте ҡарап, был ҡоштоң йә хайуандың ҡайҙа йәшәгәнен әйтә. (Һарайҙа, өйҙә, ағаста, ояла, өңдә, ҡыйыҡ аҫтында, ерҙә.)

**Өсөнсө вариант.** Бала һүрәттә бирелгән хайуан йәки ҡош балаһының һүрәтен табып, «әсәһенең» эргәһенә һала, атамаһын әйтә. Кем тиҙерәк табып үҙенең карточкаһын яба, шул еңеүсе була.

**Дүртенсе вариант.** Хайуандарҙы, ҡоштарҙы классификациялау, мәҫәлән, *ҡырағай, йорт хайуандары, йорт ҡош-ҡорттары, ҡышлаусы ҡоштар*... Уларҙы балалары менән бергә йыйыу һәм рәт һандары менән һанау. Мәҫәлән, *был һүрәттә бүре һәм бүре балаһы беренсе урында тора*.

Был уйын өс-биш йәштән тәкдим ителә. Төркөмсә йәки төркөм менән үткәрелә.















































## «НИНДӘЙ ФИГУРАҒА ОҠШАҒАН?»

(лото)

**Маҡсат:** балаларға геометрик фигураларҙы (түңәрәк, өсмөйөш, квадрат, оҙонса мөйөш) таный һәм уларға оҡшаған предметтарҙы таба, әйтә белергә өйрәтеү. Балаларҙың иғтибарын, хәтерен, телмәрен үҫтереү.

### Уйын тәртибе.

**Беренсе вариант.** Тәрбиәсе балаларға геометрик фигура төшөрөлгән схема-карточка тарата, ә үҙендә – предметлы һүрәттәр һалынған ҡумта. Ул һүрәттәрҙе күрһәтеп: «Был нимә? Ниндәй фигураға оҡшаған?» – тип һорай. Кемдә ошо предметлы һүрәткә оҡшаған геометрик фигура булһа, шул һүрәтте алып буш урынды ҡаплай. Кемдең схемаһы тиҙерәк ябыла, шул еңеүсе була.

**Икенсе вариант.** Бала һүрәттәрҙе ҡарап, атамаһын әйтеп дөйөмләштерә: *түбәтәй, шәл – баш кейеме; балаҫ, таҫтамал, янсыҡ, яҫтыҡ тышы – башҡорт халҡының шөғөлө; ҡоймаҡ, бәлеш, ваҡ бәлеш – аш-һыу* һ. б.

Был уйын өс-дүрт йәштәге балалар менән индивидуаль йәки төркөмсә менән үткәрелә.



























## «РӘССАМДЫҢ ҺҮРӘТЕН ЭШЛӘП БӨТӨР»

**Маҡсат:** һүрәткә ҡарап, уның атамаһын әйтеү, эшләнеп бөтмәгән өлөшөн атау һәм предметтың ниндәй материалдан эшләнгәнен аңлатыу. Баланың күҙаллауын, фекерләүен, танып белеүен һәм аңзиһенен үҫтереү.

### Уйын тәртибе.

**Беренсе вариант.** Балаларға тотҡалары йәки моровдары эшләп бөтөлмәгән һауыт-һаба таратыла. Балаға һауыт-һабаға тап килгән тотҡаны йәки морондо һайлап ҡуйып, атамаһын әйтеп бирергә тәҡдим ителә. Мәҫәлән, *был таба. Уға оҙонса тотҡа ҡуйҙым.*

**Икенсе вариант.** Балаларға һауыт-һаба һәм уларҙың ҡапҡастары таратыла. Улар һәр бер һауыт-һабаға ҡапҡастарын табып, уның ниндәй геометрик фигураға оҡшауын, ниндәй төҫтә икәнен әйтә.

Уйын өс-дүрт йәштән тәҡдим ителә, индивидуаль йәки төркөмсә менән үткәрелә.

















## «НИНДӘЙ ПРЕДМЕТТАР ЙӘШЕРЕЛГӘН?»

**Маҡсат:** балаларҙың буталсыҡ һыҙыҡтар араһынан бер нисә предметты күреп таныу һәләтен үҫтереү, предметтарҙы дөйөмләштереүсе һүҙҙәр менән туплау. Аң-зиһенен, күҙаллауын, фекерләү һәләтен үҫтереү.

### Уйын тәртибе.

**Беренсе вариант.** Балаларға бер-береһе өҫтөнә һалып эшләнгән предметтарҙың буталсыҡ һыҙмалары төшөрөлгән һүрәттәр тәҡдим ителә. Бала ошо буталсыҡ һыҙыҡтар араһынан бер предмет һүрәтен табып, уның контурын төҫлө ҡәләмдәр менән йөрөтөп, буяп ҡуя һәм атамаһын дөрөҫ итеп әйтә.

**Икенсе вариант.** Балалар йәшерелгән предметтарҙы табып, исемен атап, бер һүҙ менән дөйөмләштереп әйтә.

**Өсөнсө вариант.** Балалар нисә предмет йәшерелгәнен һанай һәм уларҙың ниндәй фигураға оҡшағанын йә ниндәй формала икәнен әйтә.

Был уйын дүрт йәштән тәҡдим ителә, индивидуаль һәм төркөмсә менән үткәрелә.









## «БЫЛ ҠАСАН БУЛА?»

**Маҡсат:** балаларҙың йыл миҙгелдәре тураһындағы белемдәрен нығытыу, төрлө йыл миҙгелендә йәнле һәм йәнһеҙ тәбиғәттәге үҙгәрештәр менән таныштырыуҙы дауам итеү. Баланың аң-зиһенен, фекерләүен, күҙаллау һәләтен, телмәрен һәм хәтерен үҫтереү.

### Уйын тәртибе.

**Беренсе вариант.** Тәрбиәсе берәй йыл миҙгелен сағылдырған һүрәтте күрһәтә. Мәҫәлән: «Көҙгө урман. Һары япраҡтар ерҙә ятала...». Бала һүрәткә ҡарап миҙгел үҙгәрештәрен һанай һәм һөйләм төҙөй.

**Икенсе вариант.** Бала һәр йыл миҙгеленең атамаһын әйтә, миҙгелгә ингән айҙарҙы һанай. «Бер йылда нисә миҙгел? Һәр миҙгелдә нисә ай? Бер йылда нисә ай? Был йыл миҙгеле ниндәй айҙан башлана?» тигән һорауҙарға яуап таба.

**Өсөнсө вариант.** Бала һәр миҙгелдә ниндәй төҫ өҫтөнлөк алғанын иҫкә төшөрә һәм әйтә. Ҡыш миҙгеле – аҡ, йәй – аллы-гөллө, яҙ – йәшел, көҙ һары төҫтәргә бай. Тәрбиәсе уйын алдынан балалар менән бергәләп һәр төҫ символының ниндәй йыл миҙгелен аңлатҡанын асыҡлай.

Уйын биш-алты йәштән тәҡдим ителә. Төркөмсә менән йәки индивидуаль үткәрелә.
















## «ОРКЕСТР»

**Маҡсат:** балаларҙы музыка ҡоралдарының сығарған тауыштарын, яңғырауын айырыу һәм уларҙың атамаһын әйтеп классификациялауға өйрәтеү (ҡыллы музыка ҡоралдары – ҡумыҙ, думбыра, мандолина, скрипка; клавишлы музыка ҡоралдары – тальян гармун, баян, пианино, рояль; шалтырауыҡлы музыка ҡоралдары – барабан, шөңгөр, бубен, ҡыңғырау; тынлы музыка ҡоралдары – ҡурай, борғо, һыҙғыртма флейта, һыбыҙғы (бәләкәй арҡыры флейта)). Балаларҙың иғтибарын, хәтерен, зиһенен, телмәрен үҫтереү.

### Уйын тәртибе.

**Беренсе вариант.** Балаларға музыка ҡоралдары төшөрөлгән карточкалар таратыла. Тәрбиәсе берәй уйын ҡоралын алып, шаршау артында уйнай, ә балалар тәрбиәсенең ниндәй музыка ҡоралында уйнағанын карточка менән күрһәтә.

**Икенсе вариант.** Балалар музыка ҡоралдарын дөйөмләштереп йыя, һәр музыка ҡоралының юғары йә түбән яңғырау нескәлеген айырып әйтә.

**Өсөнсө вариант.** Ансамблдә төрлө музыка ҡоралдары уйнаған тауыштарҙы айырып, музыка ҡоралдарын танып, атамаларын әйтә.

**Дүртенсе вариант.** Оркестрҙа уйнаған музыка ҡоралдарын дөйөмләштереп йыя һәм атамаһын әйтә. Мәҫәлән: *ҡурай – тынлы музыка ҡоралы, ә пианино – клавишлы музыка ҡоралы*. Кем күберәк йыя, шул еңеүсе була.

**Бишенсе вариант.** Балаға иғтибар менән һүрәттәрҙе ҡарап сығып, тик башҡорт халыҡ музыка ҡоралдарын ғына йыйып атарға тәҡдим ителә. Кем тиҙерәк йыя, шул еңеүсе була.

Уйын өс-биш йәштән тәҡдим ителә, төркөмдә йәки индивидуаль үткәрелә.



























## «АЛТЫН МАСКА»

**Маҡсат:** балаларҙы тыумыштан бирелгән алты төп кәйеф төрө менән таныштырып ҡына ҡалмай, ә уларҙы айырып, сағыштырып, үҙендә күрһәтә, әйтә белеүҙе нығытыу. Балаларҙың һүҙ байлығын, иғтибарын, фекерен, аң-зиһенен үҫтереү.

### Уйын тәртибе.

**Беренсе вариант.** Балаларға кәйефтәр күрһәтелгән маскалар бөтөн һәм дүрт өлөшкә бүленгән, буталған килеш тәҡдим ителә. Улар бөтөн маскаға ҡарап, киҫәктәрҙән кәйеф маскалары йыя. Кемдең маскаһы беренсе йыйылып бөтә, шул еңеүсе була. Йыйып бөткәс, бала был маска шул кәйефте күрһәтә тип һөйләп, үҙендә (йөҙөндә) күрһәтә.

**Икенсе вариант.** Балалар кәйефте күрһәтеүсе маскаларҙы төрлө һүҙҙәр, синонимдар менән әйтә: *шатлыҡ — һөйөү, ҡыуаныу.*

**Өсөнсө вариант.** Бала маскалағы йөҙҙәрҙең өлөштәрен сағыштырып, уларҙың ниндәй фигураға йәки ниндәй предметҡа оҡшауын әйтә.

Уйында алты бала ҡатнаша, дүрт-биш йәштән тәҡдим ителә.

# Шатлык





## Аптырау





## Ҡыҙыҡһыныу





# Ҡурҡыу





# Қайғы





# Асыу





## «НИМӘНЕҢ КҮЛӘГӘҺЕ?»

**Маҡсат:** балаларҙы предметтарҙы, күләгәһенә ҡарап, танып белергә өйрәтеү. Балаларҙың аҡыл-зиһенен, күҙаллауын, иғтибарын, хәтерен, фекерләүен һәм телмәрен үҫтереү.

### Уйын тәртибе.

**Беренсе вариант.** Балаларға предметтар төшөрөлгән төҫлө һүрәттәр һәм уларҙың күләгәләре бирелә. Балалар предметтың күләгәһен табып, төҫлө һүрәт янына һала. Кем беренсе предметтың күләгәһен табып бөтә, шул еңеүсе була.

**Икенсе вариант.** Бала һүрәттәрҙе күләгәһе менән парлап йыя, дөйөмләштереп атай. Мәҫәлән, *сарафан, камзул — өҫ кейеме.*

**Өсөнсө вариант.** Бала милли үҙенсәлектәрҙе асҡан предметтарҙы табып, бер урынға һала. Кем күберәк йыя, атай, шул еңеүсе була. Мәҫәлән: *кашмау, камзул — башҡорт халыҡ кейемдәре. Сарафан — рус кейеме.*

Был уйын дүрт-биш йәштән тәҡдим ителә, индивидуаль йәки төркөмсә менән үткәрелә.














| | |
|---|---|
|  |  |
|  |  |
|  |  |
|  |  |

| | |
|---|---|
|  |  |
|  |  |
|  |  |
|  |  |

## «ЯМАУҘАР ҺАЙЛА»

**Маҡсат:** балаларҙы предметтың бөтөн һүрәтен күҙаллап, етешмәгән төрлө формалағы өлөштәрен уға тап килтереп табыу һәләтен нығытыу, уларҙың үҙенсәлектәрен төркөмләп (формаһы, биҙәге) әйтә һәм айыра белеүҙәрен күнектереү. Балаларҙың аҡыл-зиһенен, күҙаллауын, иғтибарын, хәтерен, фекерләүен һәм телмәрен үҫтереү.

### Уйын тәртибе.

**Беренсе вариант.** Балаларға предметлы һүрәттәр һәм уларға төрлө ямауҙар таратыла. Бала предметлы һүрәттең биҙәгенә тап килтереп, биҙәкле ямауҙы таба, предметты ямай.

**Икенсе вариант.** Тәрбиәсе, был ямау ниндәй формала, тип һорағас, бала, был ямау өсмөйөш формаһында, тип яуап бирә.

**Өсөнсө вариант.** Бала ямауҙы табып, урынына ҡуйғас, нимә эшләгәнен һөйләп бирә. Мәҫәлән, *мин балаҫтың һул яҡтағы өҫкө мөйөшөнә түңәрәк ямау һалдым. Мин алъяпҡысҡа шаҡмаҡ ямау һалдым.*

Был уйын дүрт-биш йәштән тәҡдим ителә, индивидуаль йәки төркөмсә менән үткәрелә.





























## «ХАЙУАНДАРҘЫ АШАТ»

### (ЛОТО)

**Маҡсат:** балаларҙы хайуандар һәм йәнлектәр менән таныштырыуҙы дауам итеү. Ҡайһы хайуандың ниндәй аҙыҡ менән туҡланыуын асыҡлау. Балаларҙың аҡыл-зиһенен, күҙаллауын, иғтибарын, хәтерен, фекерләүен һәм телмәрен үҫтереү.

## Уйын тәртибе.

**Беренсе вариант.** Балаларға хайуандар һәм аҙыҡ төшөрөлгән предметлы һүрәттәр таратыла. Балалар хайуандың атамаһын әйтеп, ул ниндәй аҙыҡ менән туҡлана, шул һүрәтте табып тура килтереп һала. Кем беренсе йыя, шул еңеүсе була.

**Икенсе вариант.** Балаларға хайуандар һәм аҙыҡ төшөрөлгән предметлы һүрәттәр таратыла. Улар тәрбиәсенең һорауы буйынса тик үләндәр йәки бөжәктәр менән туҡланыусы йәнлектәрҙе табып йыя. Кем күберәк йыя, шул еңеүсе була.

**Өсөнсө вариант.** Балаларға хайуандар төшөрөлгән предметлы һүрәттәр таратыла. Балалар уларҙы дөйөмләштереп һайлап алалар. Кем күберәк һүрәттәрҙе дөйөмләштереп айырып ала, шул еңеүсе була. (Йорт хайуандары, ҡырағай хайуандар.)

Был уйын дүрт-биш йәштән тәҡдим ителә, индивидуаль йәки төркөмсә менән үткәрелә.

















## «ҺӨНӘР ЭЙӘҺЕНӘ ЭШ ҠОРАЛДАРЫН ҺАЙЛА»

**Маҡсат:** балаларҙы һөнәр эйәләре менән таныштырыу. Уларға кәрәкле эш ҡоралдары атамаларын иҫтә ҡалдырыу. Балаларҙың иғтибарын, хәтерен, телмәрен, фекерләү һәләтен үҫтереү.

### Уйын тәртибе.

**Беренсе вариант.** Балалар предметлы һүрәттәр араһынан һәр бер һөнәр эйәһенә яраҡлы эш ҡоралдарын табып, атамаларын әйтеп йыя.

**Икенсе вариант.** Бала был предмет атамаһы менән үҙ-ара бәйләнешле ике-өс һөйләм төҙөй: *был шприц. Уның менән врач укол яһай.*

**Өсөнсө вариант.** Балаларға һәр һөнәр эйәһенә парын әйтергә тәҡдим ителә. Мәҫәлән, *врачҡа ауырыу пациент кәрәк; уҡытыусыға — уҡыусы, төҙөүсегә — ҡоролма.* Балалар ҡыйынһынһа, өҫтәлмә һорауҙар бирелә.

Уйын өс йәштән бер бала менән, ә биш йәштән төркөмсәлә үткәрелә.






1
2
3
4
5





























10m



## «БАШҠОРТ ХАЛҠЫНЫҢ КӘСЕПТӘРЕ»
### (ЛОТО)

**Маҡсат:** балаларҙы башҡорт халҡының борондан ҡалған кәсептәре менән таныштырыу, әйберҙәрҙең ниндәй материалдан һәм нисек эшләнеүен һөйләү. Халҡыбыҙҙың кәсептәренә ҡыҙыҡһыныу, ихтирам тәрбиәләү, аң-зиһен һәләтен үҫтереү.

### Уйын тәртибе.

**Беренсе вариант.** Балаларға башҡорт халҡының кәсептәрен күҙалландырған сюжетлы һүрәттәр таратыла. Алып барыусы бәләкәй карточкалар күрһәтеп, һорау бирә: был эш ҡоралы йә булмаһа әйбер ниндәй кәсепкә ярашлы? Кем тиҙерәк үҙенең сюжетлы һүрәтенә ярашлы карточкалар табып яба, шул еңеүсе була.

**Икенсе вариант.** Бала үҙенең сюжетлы һүрәте буйынса башҡорт халҡының кәсебе тураһында эҙмә-эҙлекле һөйләй (был ниндәй кәсеп, әйбер ниндәй туҡыманан йә материалдан эшләнгән, борон-ғо башҡорт халҡы уны ҡайһы ваҡытта, ни өсөн ҡулланған).

Уйын биш-алты йәштән тәҡдим ителә, ете бала уйнай ала.

# Сигеү












# Ағас эшкәртеү





## Биҙәкләп һуғыу





# Балаҫ һуғыу












# Бәйләү





# Металл эшкәртеү





## Тире эшкәртеү





## «БАШҠОРТ ХАЛҠЫНЫҢ ШӨҒӨЛӨ»

**Маҡсат:** балаларҙы солоҡсолоҡ, малсылыҡ, балыҡсылыҡ, һунарсылыҡ – боронғо башҡорт халҡының һөнәрҙәре менән таныштырыуҙы дауам итеү. Балаларҙың телмәрен, һанау һәләтлеген, аң-зиһенен, фекерләүен үҫтереү.

### Уйын тәртибе.

**Беренсе вариант.** Сюжетлы һүрәттең темаһына ярашлы бирелгән предметтарҙы эҙмә-эҙлекле һалып сығыу. Был шөғөлдөң атамаһын әйтеп, шөғөл барышында предметтарҙың кәрәкле ролен иҫбатлау.

**Икенсе вариант.** Балалар сюжетлы һүрәттәрҙе ҡарап, эҙмә-эҙлекле итеп һөйләйҙәр. Мәҫәлән, солоҡсолоҡ. Беренсе – солоҡсо солоҡ эшләй, икенсе – уны ағасҡа элә, өсөнсө – бал ҡорттары бал йыя, дүртенсе – солоҡсо бал ала.

**Өсөнсө вариант.** Балалар халыҡ шөғөлдәрен атап, башҡорттарҙың ни өсөн теге йәки был шөғөл менән шөғөлләнеүҙәрен һөйләй һәм ниндәй милли аҙыҡ әҙерләгәндәрен әйтә.

Уйын биш йәштән тәҡдим ителә. Дүрт бала һәм алып барыусы уйнай.






Башҡорт
балы



































## «БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ҠАТЫН-ҠЫҘҘАРЫНЫҢ КӨНДӘЛЕК ЭШТӘРЕ»

**Маҡсат:** балаларҙы боронғо башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының көндәлек эштәре менән таныштырыу һәм һүрәткә ҡарап ҙур булмаған хикәйә төҙөү.

Балаларҙың ҡул моторикаһын, аң-зиһенен, хәтерен, иғтибарын, фекерләү һәм телмәр һәләтен үҫтереү.

### Уйын тәртибе.

**Беренсе вариант.** Балалар уйып алынған карточкаларҙан (пазлдар) бер бөтөн һүрәт йыялар. Кем беренсе йыйып бөтә, шул еңеүсе була.

**Икенсе вариант.** Бала һүрәтте йыйып бөткәс, хәҙерге тормош менән сағыштырып, ябай һөйләмдәрҙән торған бәләкәй генә хикәйә төҙөй.

**Өсөнсө вариант.** Бала был эште эшләү өсөн ниндәй предметтар кәрәк икәнен һанап сыға, мәҫәлән, *бойҙай, тирмән, он, май, шәкәр — талкан; бейә, һөт, көбө — ҡымыҙ.*

**Дүртенсе вариант.** Бала һәр бер биремде үтәү өсөн ниндәй эштәр башҡарылыуын әҙмә-әҙлекле һөйләй.

Был уйын биш-алты йәштән тәҡдим ителә, төркөмсә менән йәки индивидуаль үткәрелә.

















## «БАШҠОРТ ХАЛЫҠ БАЙРАМДАРЫ»

**Маҡсат:** халыҡ байрамдарына ҡыҙыҡһыныу уятыу. Миҙгел һәм йола байрамдарын айыра белеү, байрамдарҙың ни өсөн һәм ниндәй маҡсаттарға ярашлы үткәрелеүен, уларҙың үҙенсәлектәрен төшөндөрөү. Тәбиғәткә, хеҙмәткә ҡарата һөйөү, ололарға ихтирам, кеселәргә кеселекле булыу тойғоһо тәрбиәләү. Балаларҙың ижади һәм фекерләү һәләтлектәрен, хәтерен, телмәрен үҫтереү.

### Уйын тәртибе.

**Беренсе вариант.** Алып барыусы берәй байрамдың төп билдәләрен һанап сыға. Ә уйнаусылар был байрамдың нисек аталыуын, ҡайҙа, ҡайһы ваҡытта, ни өсөн үткәрелеүен иҫбат итеп, ошо байрамға ярашлы сюжетлы һүрәтте таба.

**Икенсе вариант.** Бала үҙ теләге менән берәй байрамдың сюжетлы һүрәтен һайлап ала. Ошо һүрәткә ҡарап: «Был байрамды нисек үткәрер инең?» – тигән һорауға яуап бирә, ижади хикәйә төҙөй.

Был уйын дүрт-биш йәштән тәҡдим ителә. Индивидуаль һәм төркөм менән үткәрелә.

# Ҡарға бутҡаһы



# Ҡаҙ өмәһе



# Кәкүк сәйе



## «БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ӘКИӘТТӘРЕ»

**Маҡсат:** балаларҙы башҡорт халыҡ әкиәттәре, башҡорт халыҡ кейемдәре менән таныштырыуҙы дауам итеү. Балаларҙың иғтибарын, хәтерен, фекерләү һәләтен, бәйләнешле телмәрен, ҡул моторикаһын үҫтереү.

### Уйын тәртибе.

**Беренсе вариант.** Балаларға уйып алынған карточкалар (пазлдар) һәм берәй әкиәттең сюжетлы һүрәте бирелә, улар уйып алынған карточкаларҙан бер бөтөн һүрәт йыялар. Кем беренсе йыйып бөтә, шул еңеүсе була.

**Икенсе вариант.** Бала һүрәтте йыйып бөткәс, әкиәттең исемен әйтә. Әкиәт геройҙарын атай, ҡыҫҡаса йөкмәткеһен һөйләй.

**Өсөнсө вариант.** Һүрәткә ҡарап, әкиәт геройҙарының ниндәй милли кейемдәр кейгәнен әйтеп сыға.

Был уйын дүрт-биш йәштән тәҡдим ителә, индивидуаль йәки төркөмсә менән үткәрелә.

# Башҡорт халҡы ҡайҙан килеп сыҡҡан?













Ай кызы





## «ХАЛЋЫМ БИҘӘКТӘРЕ»

**Маҡсат:** балаларҙы башҡорт халыҡ биҙәктәре менән таныштырыуҙы дауам итеү. Балаларҙың иғтибарын, хәтерен, фекерләү һәләтен, бәйләнешле телмәрен, ҡул моторикаһын үҫтереү.

### Уйын тәртибе.

**Беренсе вариант.** Балаларға уйып алынған карточкалар (пазлдар) һәм бөтөн һүрәт бирелә, улар уйып алынған карточкаларҙан бер бөтөн һүрәт йыялар. Кем беренсе йыйып бөтә, шул еңеүсе була.

**Икенсе вариант.** Бала һүрәтте йыйып бөткәс, ниндәй башҡорт халыҡ биҙәге төшөрөлгәнен ҡыҫҡаса һөйләй.

Был уйын дүрт-биш йәштән тәҡдим ителә. Уйын индивидуаль йәки төркөмсә менән үткәрелә.

















## ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Дидактик уйындар
«Нимә балаһы?» . . . . . . . . . . 4
«Ниндәй фигураға оҡшаған?» . . . . . . . . . . 21
«Рәссамдың һүрәтен эшләп бөтөр» . . . . . . . . . . 39
«Ниндәй предметтар йәшерелгән?» . . . . . . . . . . 49
«Был ҡасан була?» . . . . . . . . . . 59
«Оркестр» . . . . . . . . . . 69
«Алтын маска» . . . . . . . . . . 79
«Нимәнең күләгәһе?» . . . . . . . . . . 105
«Ямауҙар һайла» . . . . . . . . . . 117
«Хайуандарҙы ашат» . . . . . . . . . . 127
«Һөнәр эйәһенә эш ҡоралдарын һайла» . . . . . . . . . . 137
«Башҡорт халҡының кәсептәре» . . . . . . . . . . 151
«Башҡорт халҡының шөғөлө» . . . . . . . . . . 181
«Башҡорт халыҡ ҡатын-ҡыҙҙарының көндәлек эштәре» . . . . . . . . . . 191
«Башҡорт халыҡ байрамдары» . . . . . . . . . . 209
«Башҡорт халыҡ әкиәттәре» . . . . . . . . . . 217
«Халҡым биҙәктәре» . . . . . . . . . . 235

*Учебное издание*

**АЗНАБАЕВА Фирдаус Гисовна**
**ШАФИКОВА Гульназ Радмиловна**
**АГЗАМОВА Зульфия Агзамовна**

**ИГРАЯ РАЗВИВАЕМСЯ**

*(на башкирском языке)*

Редакция мөдире *Сәйҙә Рәхимова*
Мөхәррире *Алһыу Иҙелбәкова*
Биҙәлеш мөхәррире *Азат Мөхтәруллин*
Рәссамдары *Зилә Кәримова, Станислав Панфиленко, Кирилл Шанин*
Техник мөхәррире *Зәйтүнә Сыңғыҙова*
Корректорҙары *Айгөл Хәкимова, Гөлсинә Попова*

Баҫырға ҡул ҡуйылды 18.05.11. Форматы 90 x 60 $^1/_8$. Офсет ҡағыҙы.
Мәктәп гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 32,0.
Шартлы буяу отт. 129,0. Иҫәп-баҫма таб. 12,56. Тиражы 7 250 дана. Заказ 110656.

Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге
Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.

Әҙер файлдарҙан баҫылды.

Башҡортостан Республикаһының «Белая река»
нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450078, Өфө, Киров урамы, 109.